*Тема. Юл ҡағиҙәләрен өйрән, бел һәм үтә*

*Маҡсат.* 1. Балаларға юлда йөрөгәндә йәйәүлеләр ҙә, транспорт йөрөтөүселәр ҙә ҡағиҙәләр белергә һәм үтәргә тейеш икәнлеген аңлатыу.

2. Юл ҡағиҙәләрен өйрәтеү, юл билдәләре менән танышыу.

3. Балаларҙа граждажлыҡ хистәре уятыу, хәүефһеҙ йәшәргә теләк тыуҙырыу, кешелек донъяһына иғтибарлыҡ, хөрмәт кеүек һыҙаттар тәрбиәләү.

*Йыһаздар.* Юл билдәләре, плакаттар.

*Дәрес барышы.*

*I. Инеш.*

- Бөгөнгө мөһим тормош ҡағиҙәләрен өйрәнергә йыйылдыҡ. Дәрескә һеҙҙе йыр алып инер. «Мине юлдар саҡыра»

Юл йөрөмәгән бер кеше лә юҡ был донъяла.Ләкин йөрөй белмәгән кешеләрҙе һәр саҡ ҡайғы, хәүеф көтә, авариялар булып тора.Шуға күрә һәр кем юлда йөрөү ҡағиҙәләрен белергә тейеш һәм һис шикһеҙ үтәргә тейеш.

**1**- се уҡыусы. Юлдар саҡыра беҙҙе
Юл йөрөү ул күңелле.
Ултыраһың транспортҡа
Теләһәң, бар ҡалаға,
Теләһәң, бар ауылға.
Туғандарға ҡунаҡҡа.

**2** – се уҡыусы Юлда хәүефһеҙ йөрөргә
Кәрәк ҡағиҙәләр үтәргә.
Үҙеңдең иғтибарлығың менән
Кешеләргә шатлыҡ өләшергә.

**3** –сө уҡыусы Ҡағиҙәләр үтәмәү,
Тирә-яҡты айҡамау,
Алып килә хәүефкә
Алып килә ҡайғыға.

*II. Инсценировка.* Арыҫлан менән Ҡуян юл өҫтөндә туп уйнайҙар, шаяралар.

Арыҫлан. Тилибом, тилибом,
Юл ҡағиҙәләрен мы не признаем.
Ниңә улар беҙгә кәрәк?
Юлда уйнау бигерәк рәхәт!

Ҡуян. Һикерәйек, уйнайыҡ,
Ҡағиҙә уйлап тормайыҡ!
Тра-та-та, тра-та-та!
Туп һикертәм мин юлда.

Улар янына аяғы гипсҡа һалынған, ҡулы бинт менән бәйләнгән, башы яулыҡ уралған әтәс, таяҡҡа таянып, яйлап ҡына килеп етә.



Айыу. Әтәс дуҫ, ни булды һиңә?
Ҡуян. Ысынлап та, әтәскәй һиңә ни булды?
Әтәс. ( иламһырап)
Машиналар себен кеүек
оҫкан юлда
Мин йөрөнөм шашып,
ҡотороп велосипедта.
Йөрөү генә түгел, төрлө
фигуралар яһаным.

Машина бәреп киткәнен һиҙмәй
ҙә ҡалдым.
Әлдә әле тере ҡалдым мин.
Уйнамағыҙ бер ваҡытта
юл өҫтөндә.
Һеҙгә лә бәлә килер, урап
үтмәҫ бер ҙә!

Арыҫлан. Әй, әтәс дуҫ, рәхмәт һиңә,
Беҙгә шулай кәңәш биргәнеңә.
Башҡа улай юл өҫтөндә уйнамабыҙ,
Балаларҙы ла иҫкәртербеҙ бергә.

Ҡуян. Эй, балалар, аҡылығыҙ алтын булһын,
Юл өҫтөндә уйнамаһын берегеҙ ҙә
Уйнау өсөн майҙансыҡтар бик күп беҙҙә
Ҡайғы күрмәй йәшәрбеҙ беҙ барыбыҙ ҙа.

Әтәсте ике яғынан етәкләп алып китәләр, майҙансыҡта барып уйнарға тотоналар. Ҡарап ултырған уҡыусылар ҡул сабалар.

Уҡытыусы. Был ҡағиҙәне барығыҙ ҙа яҡшы белә.
Уны белеү мотлаҡ һәр кешегә.

***III. Тыңлап ултырыусыларға һорауҙар.***

1. Бына урам. Урамдың машиналар йөрөй торған өлөшөн күрһәтегеҙ.
2. Йәйәүлеләр урам аша ҡайҙан сығалар?
3. Урам сатын күрһәтегеҙ.
4. Тротуарҙы күрһәтегеҙ.

**1**-се уҡыусы.

Машиналар йөрөй торған юлдан ситтә
Йәйәүлеләр йөрөй торған юл һалынған.
Эй, кешеләр, атлағыҙ тик шул юлдан ғына.
Иҫән-имен булырһығыҙ һәр ваҡыт та.

**2** – се уҡыусы.

Тротуар ул беҙҙең өсөн ҡалдырылған
Ҡайғы-хәсрәт күрмәҫ өсөн, атла шунан.
Туғандарың янына йылмайып ҡайтырһың һин.

Ғәрипләнмәй, оҙон ғүмер кисерерһең һин.

Уҡытыусы.

Был ҡағиҙә һеҙҙең өсөн бик-бик кәрәк.

Белеү генә түгел һәр саҡ уны үтәү кәрәк.

*IV. Марш яңғырай. Юл билдәләре инә.*



Юл билдәләре атлайҙар
Төп-төҙ һәм матур итеп.
Безгә ҡунаҡҡа килгәндәр
Улар ут-һыуҙар кисеп.
Таныш булайыҡ – мин булам
Бына ошондай билдә.
Кешеләргә гел күрһәтәм
Ер аҫты юлын көн дә.
Юл аша сығып баралар
Теҙелешеп балалар.
Шул ерҙә билдә ҡуйылыр –
Һаҡ булығыҙ, шоферҙар!
Кеше юлда сирләп китһә,
Уға юлды күрһәтә
Больницаға, аптекаға
Бына ошондай билдә.

Велосипед менән сыҡһаң
Урамда һин йөрөргә –
Был билдә торған тирәгә
Барып йөрәмә бер ҙә.

Йәйәүлеләргә юл аша сығыр өсөн
һыҙаттар – «Зебралар» тамғаланған.
Арҡыры үтәм тиһәң алдағы юлыңды.
Зебра – юлдан атла, зинһар, онотма шуны.

Информацион – күрһәткестә тә була унда.
Юл билдәһе тип йөрөтәләр ул тамғаны.
Был билдә – йәйәүлеләрҙең урам аша сығыу урыны,
Урам аша сығам тиһәң, эҙлә шуны!

Уҡытыусы. Транспорт хәрәкәте көслө булған юлдарҙа йәйәүлеләрҙең урам аша сығыу урындарын юл өҫтөнән , йәки ер аҫтынан үтәләр.

Шундай билдә күрһәң әгәр
өҫтән үт һин, үт һин.
Ә быныһын күрһәң әгәр.
аҫтан үт һин.
Бер кемде лә төртмә, этмә
Тыныс атла, башҡаларға ҡамасаулама!

*V. Командалар ярышы.*



Һәр команданың капитаны бар.

*1-се станция. « Уйла – әйт»*

( 1 команда өсөн)

1. Нимә ул тротуар? ( Юлдың йәйәүлеләр йөрөй торған өлөшө.Төп юлдың эргәғенән йәки газон аша үтә )
2. **Йәйәүлеләр ҡайҙан йөрөргә тейеш?** ( Тротуар буйлап йәки йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юлдың уң яғынан.)

**(2-се команда өсөн)**

1. Нимә ул зебра? ( Ул йәйәү йөрөүселәр өсөн юл аша сыға торған урын )
2. Нимә ул тимер юл аша сығыу урыны? ( Юлдың тимер юл менән киҫешкән урыны.)

*2 – се станция « Билдәне бел »*

Командалар конверт ала, юл билдәләренең



Альбом битендә капитандар машина, светофор, йәйәү йөрөүсе һүрәттәрен төшөрөргә тейеш. Кем яҡшыраҡ һәм сюжетлы итеп төшөрөр?

***4 – се станция « Йомаҡтар »***

Транспорт саралары, юл тамғалары, хәрәкәтләнеү хаҡында йомаҡтар ҡойоу.

***5 – се станция « Ҡыҙыл – йәшел »***

« Билдәләр » командаһына ҡыҙыл шар бирәм. Һеҙ унда тыйыу тамғаһы төшөрөргә тейешһегеҙ. «Ҡағиҙәләр » командаһына йәшел шар бирәм. Уға рөхсәт тамғаһы төшөрөгөҙ.

***6 – сы станция « Юлды аша сыҡ ».***

Командалар бер рәткә теҙелә. Юлды «юғалтыу – зарһыҙ» аша сығырға кәрәк. Ҡыҙыл түңәрәк күрһәт – һәм, бөтәгеҙ ҙә бергә бер аҙым артҡа, һары тәңәрәккә- урында, йәшел түңәрәккә бер аҙым алға атларға те – йешһегеҙ. Яңылышҡан уйнаусы уйындан сыға бара. Иғтибарлы булығыҙ. Күберәк ҡатнашыусы ҡалған команда еңеүсе буласаҡ.

*VI. Йомғаҡлау.*

-Жюри йомғаҡ яһағансы, эшләгән эштәребеҙҙе дөйөмләштерәйек. Нимәләр белдегеҙ? Светофор төҫтәре нимә аңлата? Йәйәү йөрәүселәргә тәғәйенләнгән тамғаларҙы иҫкә төшөрәйек. Уйын оҡшанымы?

Жюриға һүҙ бирелә. Еңеүсе командаға приз бирелә. Бөтәгеҙгә лә рәхмәт. Ижади уңыштар теләйбеҙ.